Мəғариф федераль агентлығы

Юғары профессиональ белем биреү буйынса дəүлəт учреждениеһы

Башҡорт дəүлəт университеты

# Башҡорт əҙəбиəт ғилеме һəм тəнҡите тарихы

Программа

**Өфө – 2007**

**Төҙөүсеһе**:

**филология фәндәре кандидаты, доцент Р.Д.Мостафина**

**Башҡортостан Фәндәр академияһының мөхбир ағзаһы, филология фәндәре докторы, профессор Р.Н.Байымовтың ғилми етәкселегендә һәм редакцияһында**

## Инеш

Әҙәбиәт ғилеме фәне. Уның бурыстары, методологияһы. Әҙәбиәт ғилеме фәненең төп тармаҡтары: Әҙәби тәнҡит, әҙәбиәт тарихы, әҙәбиәт теорияһы. Уларҙың төп функциялары. Улар араһындағы бәйләнеш.

Әҙәбиәт ғилеменең ярҙамсы тармаҡтары һәм фән булараҡ библиография, текстология, историография, эвристика, библиотековедение (библиотека эше), музееведение (музей эше),алеография, авторлыҡ атрибуцияһы. Уларҙың төп маҡсаттары һәм функциялары.

## XIX быуатта әҙәбиәт ғилеме башланғыстары.

XIX быуат башында рус ғалимдары, яҙыусыларының башҡорт фольклорын, мәҙәниәтен, этнографияһын өйрәнеү, яҙып алыу, баҫтырып сығарыу буйынса эштәре. П.М.Кудряшевтың "Башҡортостан тарихы" монографияһында, "Ырымбур губернаһында халыҡтың ябай һөйләү һүҙҙәре", "Башҡорттарҙың хөрәфәттәре һәм төрлө нәмәләргә ышаныуҙары" мәҡәләләрендә, А.А.Алябьев, В.И.Даль, Л.Толстой, В.Юматов, В.Зефиров, М.Л.Михайлов, ?.?.Жуковский хеҙмәттәрендә һәм эшмәкәрлектәрендә башҡорт фольклорын, тормош-конкүреш йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеү, яҙып алыу, нәшер итеү буйынса тәүге башланғыс эштәр. В.И.Далдең "Заятүләк менән Һыуһылыу" эпосын яҙып алыуы һәм уны "Москвитянин" журналында "Башҡорт русалкаһы" исеме аҫтында баҫтырып сығарыуы. XIX быуаттың I яртыһында М.Иванов, С.Күкләшев, М.Биксуриндарҙың ғилми һәм ижади эшмәкәрлеге. М.Ивановтың "Татарская грамматика", "Татарская хрестоматия" С.Күкләшевтың "Диуане хикәйәте татар" һәм "Татар хрестоматияһына һүҙлек", М.Биксуриндың "Башланғыс ҡулланма" хеҙмәттәрендә яҙма әҙәби тел, фольклор һәм яҙма әҙәбиәт жанрҙары мәсьәләләре.

XIX быуаттың II яртыһында Морат Рәмзи, Ғарифулла Сәлихов, М.Өмөтбаев, Р.Фәхретдинов, Ә.Диваев, К. Шаһимәрҙәндәрҙең ғилми-фольклористик эшмәкәрлеге.

**М.Өмөтбаевтың ғилми эшмәкәрлеге**
**(1841-1907)**

М.Өмөтбаевтың “Йәдкәр” китабы. М.Өмөтбаевтың публицистик, тарихи-этнографик яҙмаларында башҡорт этносының килеп сығышы, социаль-иҡтисади, тарихи яҙмышы, мәғариф, әҙәбиәт, фән мәсьәләләре, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, аш-һыуҙары, рус һәм башҡорт шағирҙары ижадтары хаҡында ҡиммәтле мәғлүмәттәр.

М.Өмөтбаевтың филологик, фольклористик хеҙмәттәрендә халыҡ ижады өлгөләрен йыйыу, баҫтырып сығарыу мәсьәләләре. Уның мәҡәл, әйтем, хикмәтле һүҙ жанрҙарын, өләң, ырым, хөрәфәттәрҙе, ғәрәп халҡының аҡыллы һүҙҙәрен яҙып алыуы.

**Риза Фәхретдиновтың ғилми эшмәкәрлеге**
**(1859-1936)**

Р.Фәхретдиновтың “Аҫар” биобиблиографик, энциклопедик, ғилми-әҙәби характерҙағы хеҙмәте.

Р.Фәхретдиновтың “Шура” журналының редакторы булған йылдарҙа (1908-1917) әҙәби тәнҡиткә, башҡорт халҡын башҡа халыҡтар мәҙәниәте менән таныштырыуға ҙур иғтибар биреүе. “Шура” журналы биттәрендә “Библиография һәм тәнҡит” (“Тәҡриз һәм интиҡад”), “Рус әҙәбиәте” рубрикаларын асыуы. Уларҙа яңы донъя күргән әҫәрҙәргә регуляр рәүештә аннотациялар урынлаштырылыуы.

Уҡыу-уҡытыу, этика, педагогика буйынса дәреслек-хрестоматияларының, фәнни-методик хеҙмәттәренең идея-тематик йөкмәткеһе. Әҙәби сәхифәләрендә Яҡп бине Ноғман, Хәмит бине Иҙрис, Алдар Иҫәнгилдин, Исмәғил Бикмөхәмәтов, Т.Ялсығолов, Ғәбделнасир Ҡурсауи, Ш.Зәки, Ғ.Усман, Х.Фәйезханов, Һ.Сәлихов, Ә.Ҡарғалы, М.Ҡотош-Ҡыпсаҡи, М.Аҡмулла, Ш.Мәржәни, Ҡ.Насыри, М.Өмөтбаев, Дәрдмәнд һәм башҡа әҙиптәр хаҡында фәнни-популяр очерктары. Башҡорт һәм көнсығыш әҙиптәренең ҡульяҙма ҡомартҡыларын йыйыу, өйрәнеү буйынса текстологик һәм библиографик эшмәкәрлеге.

### XX быуат баштарында һәм 20-се йылдарҙа әҙәби тәнҡит

Быуат башында халыҡ ижады өлгөләрен туплап, баҫтырып сығарыу буйынса эштәр. Башҡорт халҡының тарихына, фольклорына, көнкүрешенә арналған материалдарҙың баҫылыуы. М.Ғафури, М.Буранғолов мәҡәләләрендә, М.Һаҙыевтың “Башҡорт тарихы”(1910), “Пугачев тарихы” (1911), Ғәбдрәшит Ғүмәриҙең “Башҡорттар бөтәләрме?”(1912), Ғ Кейековтың “Сабыйҙар өсөн шиғыр китабы” (Ҡазан, 1903) китаптарында туған тел һәм милләт яҙмышы мәсьәләләре.

1918 йылда матбуғат селтәренең киңәйеүе. “Көрәш”, “Мөхбир”, “шәреҡ ярлылары”, “Ярлы тауышы”, “Ҡыҙыл яу”, “Ҡыҙыл йондоҙ” “Ҡыҙыл армия”, “Ҡыҙыл маяҡ”, “Ҡыҙыл ҡурай” тигән газеталар сыға башлауы. 1917 йылдың декабрендә “Тулҡын” ойошмаһының барлыҡҡа килеүе. Унын Ш.Бабич, Х.Ғәбитов, Н.Таһиров һ.б. актив ағзаларының әҙәби-нәфис эшмәкәрлеге, текстологик эштәре, шағирҙарҙың шиғри йыйынтыҡтарын баҫтырып сығарыу, әҙәби кисәләр үткәреү буйынса эшмәкәрлеге.

Егерменсе йылдар әҙәби-культура хәрәкәтенең яңы осоро. Ижтимағи-сәйәси шарттар һәм әҙәби процестың үҫеше. Был осорҙа әҙәби тәнҡиттең, нигеҙҙә, әҙәби процесты ойоштороу мәсьәләләре менән шөғөлләнеүе. Матбуғаттың үҫеүе. Яңы “Йәш юҡсыл” (1925), “Яңы ауыл” (1925),

“Башҡортостан йәштәре” (1925) тигән газеталар, “Яңы юл” (1923) һәм “Белем” (1924) журналдары сыға башлауы.

Башҡортостан ғилми үҙәгенең башҡорт әҙәби теленең ғилми нигеҙҙәрен камиллаштырыу буйынса һәм мәҙәниәт өлкәһендәге эштәре. Ғилми үҙәк ултырыштарында яҙыусыларҙың ҡулъяҙма йыйынтыҡтарын тикшереү.

1928 йылда БАПП-тың ойошторолоуы. БАПП-тың эшмәкәрлегендә ыңғай һәм хаталы яҡтар. БАПП-тың тарҡалыуы.

Егерменсе йылдарҙа төрлө әҙәби ағымдар көрәше. Д.Юлтыйҙың 1925 йылда “Белем” журналында баҫылған “Яңы әҙәби ағымдарҙың гегемонияһы тураһында” тигән мәҡәләһенең теоретик һәм практик әһәмиәте.

1928 йыл, май. Мәскәүҙә пролетар яҙыусыларҙың Бөтә Союз съезы уҙғарылыуы. Унда яңы әҙәбиәттең үҫеше мәсьәләләренең ҡаралыуы. Егерменсе йылдарҙың икенсе яртыһында яңы әҙәбиәттең ижади методы тирәһендәге бәхәстәр, әҙәби фекер ҡаршылыҡтары.

Д.Юлтыйҙың ижад методына ҡағылышлы “Хәҙерге башҡорт нәфис әҙәбиәте һәм уның ижад юлдары” тигән доклады (Башҡортостан пролетар яҙыусыларҙың I ҡала конференцияһы).

С.Мираҫтың “Башҡорт әҙәбиәтенең тыуышы һәм үҫеше” (ж.”Башҡорт аймағы”, №5, 1928) һәм Ғ.Ғөзәйеровтың “Әҙәби ағымдар тирәһендә” тигән мәҡәләләрендә яңы осор әҙәбиәте хаҡында фекерҙәр.

М.Ғафуриҙың “Ҡәюм Насыри мәжмүғәһе”, “Фәтих Әмирхан үлде”, “Боронғо матбуғат. Татар һәм башҡорт матбуғаты. Элек һәм хәҙер” мәҡәләләрендә милли матбуғат торошо, әҙәби мираҫ, әҙәби оҫталыҡ хаҡында сығыштары.

## Утыҙынсы йылдарҙа әҙәби тәнҡит

Утыҙынсы йылдарҙа әҙәби тәнҡиттең йәнләнеүе. Тәжрибәле яҙыусылар рәтенә яңы әҙәби көстәрҙең өҫтәлеүе. Әҙәби тәнҡиттең методологияһы мәсьәләләре.

Утыҙынсы йылдарҙа мәҙәниәт, матбуғат үҫеше. 1934 йылдың мартында Башҡортостан яҙыусыларының I съезы үткәрелеүе. Съездың әҙәбиәт үҫешендәге әһәмиәте.

СССР яҙыусыларының I съезы (сентябрь, 1934). Съезда М.Горькийҙың доклады һәм сығыштары. А.Таһировтың “Башҡорт әҙәбиәте үҫештә”, Ғ.Амантайҙың “Башҡорт драматургияһы” тигән докладтарында башҡорт әҙәбиәтенең ҡаҙаныштары һәм бурыстары хаҡында һүҙ йөрөтөлөүе.

Утыҙынсы йылдарҙа әҙәбиәтттә ижад методы тирәһендәге бәхәстәр. Хәнәф Наумдың “Марксизм һәм сәнғәт, әҙәбиәт мәсьәләләре”, Б.Ишемғолдоң “РАПП әҙәбиәт фронтының бөтә участкаларына ла яуаплы”, Ш Шәһәрҙең “Әҙәбиәтте өйрәнеү нигеҙлектәре” мәҡәләләрендә ижади метод мәсьәләһендә диалектик материализм тәғлимәтенә таяныуҙары.

А.А.Фадеевтың “Иҫке һәм яңы. Художестволы ижад мәсьәләләре” (“Литературная газета”, 1932 йыл) тигән мәҡәләһендә был методҡа киң аңлатма биреүе. СССР яҙыусыларының I съезының (сентябрь, 1934 йыл) быға тиклем бәхәсле килгән ижади методҡа социалистик реализм тигән исемде нығытыуы.

Х.Наумдың “Социалистик реализм һәм тәнҡит”, Ә.Чаныштың “Социалистик реализм һәм әҙәби тәнҡит”, Ш.Шәһәрҙең “СССР совет яҙыусылары союзы ойоштороу комитетының II пленумы тураһында” тигән мәҡәләләрендә яңы ижад методының башҡорт әҙәбиәтендә формалашыуы мәсьәләләренең яҡтыртылышы.

СССР яҙыусыларының 1936 йылда Минскиҙа уҙғарылған пленумында башҡорт әҙәбиәтенә, әҙәби тәнҡитенә ҙур иғтибар бирелеүе.

Был йылдар әҙәби тәнҡитендә культура мираҫы, синфилыҡ, партиялылыҡ, халыҡсанлыҡ мәсьәләлре тирәһендәге фекер ҡаршылыҡтары.

Утыҙынсы йылдар әҙәби тәнҡитендә әҙәбиәттең миллилеге мәсьәләһе. Ғ.Амантайҙың “Милли әҙәбиәтте билдәләү принциптары” мәҡәләһе.

Утыҙынсы йылдарҙың икенсе яртыһында әҙәби тәнҡит жанрҙарының төрлөләнеүе. Әҙәби оҫталыҡ, йөкмәтке һәм форма, әҙәби стиль, жанр, фольклор мәсьәләләренә иғтибар көсәйеүе.

Ғ.Амантайҙың “Иң йәш совет драматургияһы”, “Башҡорт прозаһы тураһында”, Д.Юлтыйҙың “Башҡорт драматургияһы тураһында”, А.Карнайҙың “Беҙҙә проза”, “Прозабыҙ тураһында”, Ж.Лоҡмановтың “Әҙәби жанр мәсьәләһе” тигән мәҡәләләрендә айырым жанрҙар проблемаларының яҡтыртылышы.

З.Исҡужиндың “Сюжет һәм композиция мәсьәләләре”, А.Кудаштың “Әҙәбиәт фәнендә образ мәсьәләһе” тигән мәҡәләләрендә әҙәби оҫталыҡ хаҡында фекерҙәр.

Ә.Чаныштың “Октябрь” журналы һандарында баҫылған “Әҙәбиәт теорияһы” мәҡәләләр серияһындағы теоретик тикшеренеүҙәренең башҡорт әҙәбиәт ғилеме өсөн әһәмиәте.

Ғ.Амантайҙың “Башҡорт әҙәбиәте” (1934), Ш.Шәһәрҙең “Башҡортостан яҙыусылары тураһында. I киҫәк” (1933) тигән хеҙмәттәренең, айырым яҙыусылар ижадын тикшереүгә арналған кисәләрҙең, башҡорт әҙәбиәтенең бер нисә йыл эсендәге үҫешен байҡаған күләмле мәҡәләләрҙең башҡорт әҙәбиәте тарихын яҙыуҙың тәүге башланғыстары булыуы.

Утыҙынсы йылдарҙың аҙаҡтарында милли интеллигенцияның репрессияланыуының әҙәбиәт һәм тәнҡит үҫешенә кире йоғонтоһо. Вульгар социологизм һәм “конфликтһыҙлыҡ теорияһы” тенденцияларының әҙәбиәттә ныҡлап тамыр йәйә башлауы.

Егерменсе быуаттың һуңғы йылдарында баҫылған хеҙмәттәрҙә репрессияланған милли интеллигенция яҙмышына объектив баһа.

## Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында әҙәби тәнҡит

Әҙәби тәнҡиттә лә әҙәбиәттәге һымаҡ ҡаһарманлыҡ, совет патриотизмы, Тыуған илде һаҡлау темаларының үҙәктә тороуы.

Р.Ниғмәтиҙең “Һуғыш көндәрендә яҙыусылар” (1944), Б.Бикбайҙың “Ватан һуғышы көндәрендә яҙыусылар” (1942), Ә.Усмановтың “Һуғыш йылдарында башҡорт сәнғәте” (1942) тигән сығыштарында әҙәбиәттең заман менән бәйләнеше мәсьәләһе.

Башҡорт яҙыусыларының СССР яҙыусылары менән ижади бәйләнештәре. Башҡортостанға Украина Фәндәр Академияһы һәм Яҙыусылар ойошмаһының эвакуацияланыуы. П.Тычинаның “М.Ғафури ижадында патриотизм” хеҙмәте.

К.Мәргәндең “Һуғыш фольклоры”(1944) китабы. Ә.Харисовтың “Әҙәбиәт теорияһы” (1944) хеҙмәтендә тәүге фәнни-теоретик тикшеренеүҙәрҙең әҙәбиәт ғилеме өсөн әһәмиәте.

## Һуғыштан һуңғы осор әҙәби тәнҡит
## (1945-1960)

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа әҙәби тәнҡиткә иғтибар көсәйеүе. 1946, 1948, 1949 йылдарҙа әҙәбиәтселәрҙең әҙәби тәнҡит проблемаларына арналған махсус йыйылыштары. 1954 йыл Башҡортостан яҙыусыларының II съезында әҙәби тәнҡит мәсьәләләренең ҡаралыуы. Әҙәби тәнҡит торошо хаҡында Ғ.Рамазановтың доклады.

Әҙәби портрет жанрының йәнләнеүе. Әҙәби тәнҡиттә тарихи-теоретик, проблематик, тематик принципҡа ҡоролған, яҙыусыларҙың юбилейҙары айҡанлы яҙылған, әҙәби процестың бер нисә тиҫтә йыл эсендәге үҫеү үҙенсәлектәрен байҡаған мәҡәләләрҙең йәнләнеүе. Ә.Харисовтың “Утыҙ йыл

эсендә башҡорт әҙәбиәте”, “Башҡорт халыҡ поэзияһы”, Ғ.Хөсәйеновтың “Башҡорт әҙәбиәтендә жанрҙар проблемаһы”, “Поэзияның лирик жанрҙары хаҡында”, Ғ.Рамазановтың “Башҡорт поэзияһында совет кешеһе образы” мәҡәләләре.

Ә.Усмановтың (1910-1982) әҙәбиәт мәсьәләләренә арналған фәнни мәҡәләләре.

Башҡортостан яҙыусыларының III съезы (1958). Әҙәбиәт һәм әҙәби тәнҡит үҫешенең йомғаҡтары, бурыстары.

## Алтмышынсы – етмешенсе йылдарҙа әҙәбиәт ғилеме һәм әҙәби тәнҡит

XX быуаттың 60-70-се йылдарында художестволы әҙәбиәт менән бергә әҙәби тәнҡиттең дә йәнләнеүе. Һуғыштан һуң әҙәби тәнҡиткә иғтибарҙың көсәйеүе.

Әҙәби тәнҡиткә Ғ.Хөсәйенов М.Ғәйнуллин, К.Әхмәтйәнов, С.Сафуанов, М.Минһажетдинов, Ә Хәкимов, Н.Зарипов, З.Нурғәлин, Ә.Сөләймәнов, М.Уразаев, Р.Сабитов, Х.Назаров, Ҡ.Аралбаев, Т.Сәғитов, И.Бүләков, М.Мәмбәтов, С.Кусимова һәм башҡа тәнҡитселәрҙең килеүе.

Яҙыусылар съездарының регуляр рәүештә үткәрелә башлауы. Һәр бер съезда тәнҡит эштәренә йомғаҡтар менән докладтар тыңланыуы. 1968 йыл (VIсъезд) – тәнҡит буйынса К.Әхмәтйәнов доклады.

КПСС Үҙәк Комитетының 1972 йылғы “Әҙәби-сәнғәт тәнҡите тураһында” ҡарары. Унда тәнҡит һәм әҙәбиәт ғилеменә иғтибар һәм талаптар мәсьәләләре.

Башҡортостан яҙыусыларының йыл йомғаҡтарына ҡарата йыйылыштарында, йәш һәм башлап яҙыусыларҙың республика конференцияһында (1975, 1978) Р.Байымовтың тәнҡит эштәренә йомғаҡ яһаған докладтары.

Ғ.Хөсәйеновтың “Тәнҡит – хәстәрлеккә мохтаж” (“Совет Башҡортостаны”, 26 ноябрь, 1971), “Әҙәби тәнҡит һәм әҙәбиәт” (1973), К.Әхмәтйәновтың “Тәнҡит: йомғаҡтар һәм бурыстар” тигән мәҡәләләрендә профессиональ тәнҡит мәсьәләләре.

Әҙәби тәнҡиттә заман һәм замандаш, әҙәби оҫталыҡ, жанрҙар, әҙәбиәт һәм фольклор мәсьәләләренең үҙәктә тороуы.

Жанр, стиль мәсьләләре буйынса тикшеренеүҙәр: Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты белгестәренең “Башҡорт әҙәбиәтендә жанрҙар проблемаһы” (1976) һәм БДУ уҡытыусыларының “Әҙәбиәт. Фольклор. Әҙәби мираҫ” (1975 - 1-се киҫәк, 1976 – 2-се киҫәк) хеҙмәттәре. Быңдай типтағы сериялы махсус йыйынтыҡтарҙың тематик, проблематик даирәһе.

**Әҙәби тәнҡиттең жанр йәһәтенән төрләләнеүе. Йыллыҡ күҙәтеү мәҡәләләре жанрының дауам ителеүе. Яҙыусылар ижадына арналған тәүге монографияларҙың яҙылыуы:** Ғ.Хөсәйенов “С.Кудаш ижады” (1959), “Халыҡ щағиры Ниғмәти” (1960), “Д.Юлтый. Тормошо һәм ижады” (1963), “Халыҡ шағиры М.Кәрим” (1965), Ғ.Рамазанов “М.Ғафури ижады” (1965), С.Сафуанов “А.Карнай. Тормошо һәм ижады” (1960), М.Ғәйнуллин “Драматургия С.Мифтахова” (1959), М.Минһажетдинов “Һ.Дәүләтшина. Тормошо һәм ижады” (1966), Н.Зарипов “Тәүге гвардеецтарҙың береһе” (1968), К.Әхмәтйәнов “Н.Нәжми – шиғыр оҫтаһы” (1974). Уларҙың төҙөлөү принциптары.

**Башҡорт әҙәбиәте тарихын яҙыу буйынса тәүге эштәр.** Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты һәм БДУ ғалимдарының Башҡортостан райондарына материалдар йыйыу, туплау маҡсатындағы экспедициялары. “История башкирской советской литературы. Очерки. Ч.1 (1963). Ч.2. (1966)”. “Башҡорт әҙәбиәте тарихы” (Өфө, ТТӘИ, 1967), “История башкирской советской литературы” (М., 1977) хеҙмәттәрендә башҡорт әҙәбиәтенең совет осорондағы үҫеш үҙенсәлектәре, тематика, жанр мәсьәләләре, әҙәби процестың үҫеш тарихы. Был хеҙмәттәрҙең структур принциптары,

ҡаҙаныштары, әҙәбиәт ғилемендәге әһәмиәте. В.Әхмәҙиевтың “XX быуат башы башҡорт әҙәбиәте” хеҙмәтенең революцияға тиклемге башҡорт әҙәбиәтенең тарихын өйрәнеү, йыйыуҙағы әһәмиәте.

Әҙәби тәнҡиттә һәм әҙәбиәт ғилемендә әҙәби мираҫты, бигерәк тә халыҡ ижадын тәүге фәнни тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәһе булараҡ монографик хеҙмәттәрҙең яҙылыуы. К.Мәргәндең “Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары” (1961), Ә.Харисовтың “Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. XVIII - XIX быуаттар” хеҙмәттәре. С.Галиндың “Йылдар һәм йырҙар” хеҙмәтендә башҡорт йырының поэтик тәбиғәте, К.Мәргәндең “Халыҡ күңеленең көҙгөһө” (1960) китабында афористик жанрҙар мәсьәләләре.

К.Әхмәтйәновтың “Әҙәби терминдар һүҙлеге” (1965), “Әҙәбиәт теорияһы” (1971) хеҙмәттәре – милли әҙәби күренештәрҙе теоретик характерҙа анализлаған һәм дөйөмләштергән тәүге фәнни тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәһе.

Әҙәби-тәнҡит мәҡәләләр йыйынтыҡтарында төрлө әҙәби-ғилми проблемалар, жанрҙар мәсьәләләре. Ә.Харисовтың “Әҙәби күренештәр” (1964), Ғ.Хөсәйеновтың “Хәҙерге әҙәбиәт донъяһында” (1973), Х.Зиннәтуллинаның “Заман. Образ. Характер” (1977), “Яңы офоҡтарға” (1974, яуаплы редакторы Р.Н.Байымов), З.Нурғәлиндың “Заман һәм герой” (1975) китаптары.

**Поэзия өлкәһендәге тикщеренеүҙәр:** К.Әхмәтйәновтың “Башҡорт поэмаларының композиция мәсьәләләре” (1962), “Шиғриәт иленә сәйәхәт” (1972), Ғ.Хөсәйеновтың “Заман һәм поэзия” (1964), “Башҡорт совет поэзияһының ҡайһы бер мәсьәләләре” (1957), “Башҡорт поэияһының үҫеү юлдары” (1968), “Заман. Әҙәбиәт. Әҙип” (1978) хеҙмәттәрендә шиғриәт, уның жанрҙары, үҫеш тарихы мәсьәләләренең яҡтыртылышы.

Проза өлкәһендәге тикшеренеүҙәр: Ә.Вәхитовтың “Эпик киңлектәрҙә” (1964), “Таланттың асылы” (1972), “Ижади портреттар” (1976), “Башкирский советский роман” (М, Наука, 1978), Ә.Хәкимовтың “Әҙәбиәт һәм заман”

(1967), З.Нурғәлиндың “Интернациональная по духу” (1979, Р.Байымовтың “Шаг в зрелость” (1975), “Ижади биҙәктәр” (1977) хеҙмәттәрендә башҡорт прозаһында жанрҙар, әҙәби оҫталыҡ, тарихилыҡ принцибының формалашыуы, әҙәбиәттең заман менән бәйләнеше мәсьәләләре.

Драматургия буйынса рецензиялар, фәнни хеҙмәттәрҙең яҙылыуы. М.Ф.Ғәйнуллиндың “Ысынбарлыҡ. Конфликт. Характер” (1975), “Становление и развитие социалистического реализма в башкирской драматургии” (М, 1975) хеҙмәттәрендә башҡорт драматургияһының үҫеш юлдары, социалистик реализм методының формалашыу тарихы.

Публицистика, балалар әҙәбиәте, сатира һәм юмор буйынса тәнҡит мәҡәләләре, фәнни хеҙмәттәрҙең аҙ булыуы, был өлкәләге тикшеренеүҙәрҙең артта ҡалыуы.

Матбуғат биттәрендә башҡорт әҙәбиәтенең көнүҙәк мәсьәләләре хаҡында “түңәрәк өҫтәл” һөйләшеүҙәренең йәнләнеүе. Шул йылдарҙа “Ағиҙел” журналында (1972 йыл, №5) “Кем ул беҙҙең әҙәбиәттең бөгөнгө геройы” тигән темаға һөйләшеүҙәрҙә замандаш образын сағылдырыу проблемаһының күтәрелеүе.

Әҙәби бәйләнештәр мәсьәләһе буйынса етди хеҙмәттәрҙең барлыҡҡа килеүе. Башҡорт дәүләт университетының 1970 йылда баҫып сығарған “СССР халыҡтары культураһының сәскә атыуы, яҡынайыуы һәм үҙ-ара байығыуы” тигән йыйынтыҡта М.Рәхимҡоловтың “Дуҫлыҡ сәхифәләре”, “Рус-башҡорт әҙәби-фольклор бәйләнештәре” хеҙмәттәре. С.Сафуановтың “Дуҫлыҡ хисе – йөрәк түрендә”, “Башҡортостан тураһында латыш романы” мәҡәләләре, “Дуҫлыҡ, туғанлыҡ сәхифәләре”, (1979), “Межнациональные связи башкирской литературы” (М, 1979) китаптарында әҙәби бәйләнештәр мәсьәләләре.

**Ә.Харисов. Тормошо. Ғилми эшмәкәрлеге (1914-1977).**

Биографияһы. Утыҙынсы йылдарҙа тел ғилеме буйынса хеҙмәттәре. 1935 йылда К.Даян менән берлектә яҙған “Стилистика. V–VIП кластар” тигән дәреслеге. Кылым категориялары буйынса яҙылған кандидатлыҡ диссертацияһы.

40-50-се йылдарҙағы әҙәби процесс хаҡында мәҡәләләре. “Утыҙ йыл эсендә башҡорт әҙәбиәте” (1949), “Башҡорт совет драматургияһының торошо һәм бурыстары” (1949) мәҡәләләре - башҡорт әҙәбиәте тарихын яҙыуҙағы тәүге башланғыстар.

Ә.Харисовтың теоретик тикшеренеүҙәр өлкәһендәге тәүге фәнни хеҙмәт буларак "Әҙәбиәт теорияһы" (1944) китабы. Уның башҡорт әҙәбиәт ғилеме өлкәһендәге әһәмиәте.

1964 йылда баҫылып сыккан “Әҙәби күренештәр” әҙәби-тәнкит мәҡәләләр йыйынтығында башкорт әҙәбиәтенең үҫеш процесы, жанр һәм тематик төрлөлөк мәсьәләләре.

“Башкорт халкының әҙәби мираҫы XVIII-XIX быуаттар" (1965) монографияһында фольклор, әҙәби мираҫ мәсьәләләре.

“Рухи тамырҙар” (1984), “Үткән ғүмер - ҡалған хәтер” (1997) ғилми-теоретик, публицистик мәҡәләләр йыйынтыктарында әҙәби мираҫ, фольклор, әҙәби процесс үҫеше, нәфис ижад мәсьәләләренең яҡтыртылышы.

Әхнәф Харисовтың текстология өлкәһендәге эшмәкәрлеге.

## Кирәй Мәргән (Әхнәф Нурый улы Кирәев). Тормошо. Ғилми эшмәкәрлеге (1912-1984).

Биографияһы. Утыҙынсы йылдарҙағы һәм Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы журналислык эшмәкәрлеге.

“Һуғыш фольклоры” (1944) китабы. “Халыҡ күңеленең көҙгөһө” (1960) һәм “Башкорт халык мәҡәлдәре” (1960) хеҙмәттәрендә башкорт халкының афористик жанрҙары мәсьәләләре.

Кирәй Мәргәндең “Башкорт халкының эпик комарткылары” (1961). “Эпические памятники башкирского народа" (1963), “О жанровых особенностях эпической поэзии башкирского народа” (1964), “Башкирский народный героический эпос” (1970) хеҙмәттәрендә эпик өлгөләрҙе йыйыу, туплау, нәшер итеү, ғилми-теоретик яктан өйрәнеү мәсьәләләре. Уларҙа фольклор жанрҙарының үҙенсәлектәре яктыртылышы.

“Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары” хеҙмәте. Унын структур үҙенсәлектәре. Эпостар, тарихи йырҙар, бәйеттәр, кобайырҙар, көнсығыштан ингән ҡомартҡылар хаҡында ғилми-теоретик фекерҙәре. Эпик традицияларҙы дауам итеү, фольклор өлгөләрен йыйыу, өйрәнеү мәсьәләләре.

“Башкорт халык ижады” (1982) юғары укыу йорттары студенттары өсөн дәреслеге Унда башкорт фольклорын комплекслы, системалы өйрәнеү мәсьәләһе.

К.Мәргәндең халык-ара фольклор бәйләнештәрен нығытыу буйынса эшмәкәрлеге, халык-ара симпозиумдарҙағы сығыштары.

## Марат Минһажетдиновтыц ғилми эшмәкәрлеге (1934-1972).

Биографияһы. 1954-1959 йылдарҙа матбуғатта баҫылып сыҡкан, шул осор әҙәби процестағы көнүҙәк мәсьәләләрҙе яҡтырткан “Яҙыусы патриот Низам Кәрип әҫәрҙәре”. “Ҡыуандыра ла, борсой ҙа”, “Али Карнай әҫәрҙәре”, “Шиғыр образ менән эш итеүҙе ярата” мәҡәләләре. Уларҙа ижади оҫталыҡ мәсьәләләре.

М. Минһажетдиновтың “Һәҙиә Дәүләтшина (Тормошо һәм ижады)” (1966) монографияһында Һәҙиә Дәүләтшина образы. Әҙибәнең тормош юлы.

Башланғыс ижады. Тәүге хикәйәләрендә һәм "Айбикә" повесында әҙибәнең ижади талант һыҙаттары. “Ырғыҙ” романына комплекслы анализ аша Һәҙиә Дәүләтшинаның талант үҙенсәлектәрен асыу. Монографияла тикшеренеүҙәрҙең “Һәҙиә Дәүләтшина яҙмышы - халыҡ тарихының бер күҙәнәге" концепцияһынан яҡтыртылыуы. "Поэмаларға бер ҡараш" мәҡәләһендә 60-сы йылдар шиғриәтендә поэма жанрында өлгәшелгән уңыштар, сюжет ҡороуҙағы новаторлыҡ, поэтик оҫталыҡ мәсьәләләре ҡуйылыуы.

“Башҡорт халҡының әкиәт эпосы” (“Ҡәләмендә ҡөҙрәт бар”, Өфө 1995; Төҙөүселәре: Т.Килмөхәмәтов, Ә. Сөләймәнов) хеҙмәтендә әкиәт жанрына төрлө яҡлы анализ. Әкиәт жанрын өйрәнеү тарихы, классификациялау мәсьәләләре.

"Башҡорт легендалары”(1970) хеҙмәтендә башҡорт фольклористикаһында легенда жанрын йыйыу, туплау, өйрәнеү мәсьәләләре.

М.Минһажетдиновтың “Башҡорт халыҡ ижады” томдарын әҙерләү буйынса текстологик эшмәкәрлеге. М.Минһажетдиновтың педагогик эшмәкәрлеге.

## Ким Әхмәтйәновтың ғилми эшмәкәрлеге (1932-1981).

Биографияһы. Тәүге фәнни мәҡәләләрендә башҡорт шиғриәте, әҙәбиәт үҫеше хаҡындағы теоретик фекерҙәре.

К Әхмәтйәновтың “Башҡорт поэмаларының композиция мәсьәләләре” (1962) тигән хеҙмәтендә поэма жанрында сюжет-композиция ҡороу оҫталығы мәсьәләләре.

“Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге” (1965) хеҙмәтендә әҙәби-ғилми терминдарға теоретик аңлатма. "Әҙәбиәт теорияһы" (1971- I баҫма, 1985 - П баҫма, 2003 - III баҫма) хеҙмәтендә әҙәби күренештәрҙең теоретик нигеҙҙәре, әҙәби ҡанундарҙың милли һүҙ сәнғәте миҫалдарында яктыртылышы. Был ғилми-теоретик хеҙмәттәрҙең башҡорт әҙәбиәте ғилемендәге әһәмиәте.

Шиғриәт иленә сәйәхәт" (1967) әҙәби-тәнҡит мәҡәләләр йыйынтығында шиғриәттең проблемалар киңлеге, жанрҙар төрлөлөгө мәсьәләләренең сағылышы. Шиғриәттә әҙәби оҫталыҡ проблемаларының ҡуйылыуы.

“Назар Нәжми - шиғыр оҫтаһы” (1974) һәм “Ғ.Сәләм. Тормошо һәм ижады” (1980) монографияларында шағирҙарҙың ижади индивидуаллеге, идея-эстетик ҡараштары. әҙәби таланты, новаторлығы мәсьәләләрен шиғри үрнәктәре нигеҙендә асыуы.

“Матурлыҡ. Батырлыҡ. Шиғриәт” (1982) китабында поэтик оҫталыҡ мәсьәләләре. Шиғриәттең үҫешендә традиция һәм новаторлык кеүек проблемаларҙың был хеҙмәттең үҙәгенә ҡуйылыуы, поэтик асыштар һәм табыштар, шиғри һүҙгә һаҡсыл мөнәсәбәт, поэтик һүҙ ҡәҙере кеүек мәсьәләләргә етди иғтибар бирелеүе.

К.Әхмәтйәновтың “Поэтик образлылыҡ” хеҙмәтендә поэтиканың тарихи аспектта яктыртылыуы. Был хеҙмәттә поэтик образлылыҡ яһалыу юлдары, поэтиканың һүҙ менән образ араһындағы ҡаршылыҡҡа нигеҙләнгән осраҡ-ары, һүрәтләү саралары, типиклаштырыу, образлылыҡ тәбиғәтенең тарихи аспекттары, башҡорт эпостарындағы, фольклорҙағы образлылыҡ, фольклор традицияларының һүҙ сәнғәтендә образдар тыуҙырыуҙағы әһәмиәте һ.б. мәсьәләләрҙең яҡтыртылышы

К.Әхмәтйәновтың текстология өлкәһендәге эшмәкәрлеге “Башҡорт поэзияһының антологияһы”' (1971. Авторҙаштары Ә Харисов, Ғ.Хөсәйенов) хеҙмәте.

К.Әхмәтйәнов - фәнни-методик программалар, мәктәптәр өсөн дәреслектәр авторы. К.Әхмәтйәновтың ғилми стиленең үҙенсәлектәре

## Хәҙерге әҙәбиәт ғилеме һәм тәнҡит
## (1980-2011)

Хәҙерге әҙәбиәт ғилеме һәм әҙәби тәнҡиттең әҙәби процесс менән бергә активлашыуы, йәнләнеүе. Тукһанынсы йылдарҙағы йәмғиәттәге боролоштарҙың әҙәби-эстетик фекер үҫешенә лә йоғонтоһо. Совет осорондағы әҙәбиәт үҫешенең ҡайтанан баһаланыу зарурлығының алға баҫыуы. Үткәндәргә объектив баһа булдырыуҙа әҙәби тәнҡиттең роле.

Башҡортостан яҙыусылары съездарының әҙәби тәнҡитте үҫтереүҙәге әһәмиәте. Һуңғы XIV (21-22 апрель, 2006 йыл), XV (14-15 апрель, 2011) съездарҙа әҙәбиәт үҫешенең йомғаҡтары, бурыстары. Тәнҡит секцияһының эштәре, бурыстары.

Башҡорт әҙәбиәте ғилеменең һәм әҙәби тәнҡитенең үҫешендә матбуғаттың роле. “Ағиҙел”, “Бельские просторы”, “Ватандаш”, “Шоңҡар”, “Йәдкәр”, “Проблемы востоковедения” һ.б. журналдарҙа айырым тәнҡит рубрикаларының булдырылыуы. “Ағиҙел” журналының бөгөнгө әҙәбиәттең, әҙәби тәнҡиттең актуаль мәсьәләләренә арналған түңәрәк өҫтәл һөйләшеүҙәре үткәреүе. Үҙәк газеталарҙың  да әҙәби тәнҡиткә иғтибар бүлеүе.

Әҙәбиәт ғилемендә һәм әҙәби тәнҡиттә Ғ.Хөсәйенов, З.Нурғәлин, Р.Бикбаев, Р.Байымов, С.Сафуанов, Ә.Сөләймәнов, Т.Килмөхәмәтов, М.Ғәйнуллин, Ғ.Ҡунафин, М.Иҙелбаев, З.Шәрипова, М.Нәҙерғолов, Г.Гәрәева һәм башҡаларҙың актив эшмәкәрлеге.

Хәҙерге әҙәбиәт ғилеменең ҙур ҡаҙанышы – башҡорт әҙәбиәтенең революцияға тиклемге һәм унан һуңғы ҙур үҫеш юлын үҙ эсенә алған фундаменталь хеҙмәттең, “Башҡорт әҙәбиәте тарихы” 6 томлығының, яҙылыуы. I, II томдарҙа революцияға тиклемге әҙәбиәттең үҫеш эволюцияһы, III–VI томдарҙа совет осорондағы әҙәбиәттең үҫеш үҙенсәлектәре

яҡтыртылыуы. Был 6 томлыҡтың структур үҙенсәлектәре. Әҙәбиәтте осорҙарға бүлеп өйрәнеүҙең принциптары.

Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры кафедраһы уҡытыусылары тарафынан яҙылған “Егерменсе быуат башҡорт әҙәбиәте” (Өфө, 2003, Яуаплы редакторы: Р.Н.Байымов) хеҙмәтендә башҡорт әҙәбиәтенең бер быуат эсендәге үҫеш тарихының яҡтыртылышы. Хеҙмәттең структур үҙенсәлектәре, төҙөлөү принциптары. Совет осорондағы башҡорт әҙәбиәтенең үҫешен яңы ҡараштар күҙлегенән баһалау йәһәтенән әҙәбиәт ғилемендәге әһәмиәте.

Шиғриәттең үҫеш үҙенсәлектәре хаҡында фәнни тикшеренеүҙәр. Р.Бикбаевтың “Замандың шиғри йылъяҙмаһы” (1980), “Время. Поэт. Народ” (1986), “Эволюция современной башкирской поэзии” (1980), Ғ.Хөсәйеновтың “Башкирская советская поэзия. 1917-1980” (М, 1983), “Шағирҙар” (1981), “Башҡорт шиғриәте. Шиғриәт һүҙлеге” (2003), К.Әхмәтйәновтың “Матурлыҡ. Батырлыҡ. Шиғриәт” (1982) хеҙмәттәрендә шиғриәттең үҫеш тарихы байҡалыуы, шиғриәттә оҫталыҡ мәсьәләләренең күтәрелеүе.

Проза өлкәһендәге фәнни-теоретик тикшеренеүҙәр: З.Нурғәлиндың “Замандарҙан замандарға” (1999), “Дәүерҙәр һулышы” (2003), И.Вәлитовтың “Ижади үрҙәргә” (1988), Ә.Вахитовтың “Жанр и стиль в башкирской прозе” (1982), Р.Байымовтың “Поискам нет конца” (1980), “Судьба жанра” (1984), “Башкирский историко-революционный роман” (1984), “Истоки и устья” (1997), “Гармония многообразия” (2007), “Төрлө йылдарҙа тыуған уйҙар” (2007), Г.Гәрәеваның “Хәҙерге прозала оҫталыҡ мәсьәләләре” (1997), “Заман көҙгөһө - геройҙың рухи донъяһы” (Өфө, 2003) китаптарында башҡорт прозаһының идея-проблематик, жанрҙар, стиль, оҫталыҡ мәсьәләләре.

Башҡорт драматургияһы проблемаларының әҙәбиәт ғилеме фәнендә өйрәнелеү кимәле. М.Ғәйнуллиндың “Башҡорт драматургияһының үҫеү юлдары” (1986), Т.Килмөхәмәтовтың “Башҡорт трагедияһының поэтика мәсьәләләре” (1984), “Драматургия һәм драматургтар” (1986), “Поэтика

башкирской драматургии” (1997), “Халыҡсанлыҡ көсө” (1998), Р.Әхмәҙиевтың “Шағир драматургияһы” (1994), “Бөгөнгө башҡорт драматургияһында жанр-стиль эҙләнеүҙәре” (1995), “Суть и суд жанра” (1997) хеҙмәттәрәендә башҡорт драматургияһының үҫеш тарихы, поэтика, жанр, стиль мәсьәләләре.

Әҙәбиәт ғилемендә революцияға тиклемге башҡорт әҙәбиәте тарихын өйрәнеү. Ғ.Хөсәйеновтың “Быуаттар тауышы” (1984), хеҙмәтендә революцияға тиклемге башҡорт әҙәбиәтен осорҙарға бүлеп өйрәнеү, тарихи поэтика мәсьәләләре.

